Һәнәк
1987
7
АПРЕЛЬ
ISSN 0208—094X

У. ҒӘЙФУЛЛИН һүрәте




— **Бөтә туған-тыумасам миндә яҙылған — дүрт бүлмәле квартир бирегеҙ!**
— Вся родня у меня прописана — дайте четырехкомнатную квартиру!

Энгәм АТНАБАЕВ

# Көтәләр



— Илдә бара бөйөк үҙгәреш
һәм үҙгәреш менән тиҙләнеш.
Ошо хәлдәр һеҙгә танышмы!
Заман менән бергә барышмы!

Райначальник яуап ҡайтарҙы,
Ғәҙәтенсә тыйнаҡ маҡтанды:

— Заманан артта ҡалған юҡ.
Әҙерләндек ныҡлап алдан уҡ:
«Тар кругты» йыйып һөйләштек,
Ағай-эне менән кәңәштек,
Урта звено менән гәпләштек...
Ҡатын-ҡыҙҙар ҡаршы килмәне,
Ҡарттар «за» булдылар, билдәле,
Йәштәр уларҙан да элгәре.



«Бөтһөн,— тинек,— эштә торғонлоҡ,
Торғонлоҡҡа түҙеп тороу юҡ!
Уңға, һулға, артҡа таймайыҡ,
Алға ғына ҡарап барайыҡ!»

Лозунгыны шулай ташланыҡ.
Ең һыҙғанып эшкә башланыҡ.



һәм йыйылыш йыйҙыҡ ҙур итеп,
Бөтә тирә-йүнгә нур итеп,
Көн тәртибе бирәү: үҙгәреш,
Үҙгәрешкә ҡарап тиҙләнеш.
Хужабыҙҙан доклад һөйләттек,
Урта звенонан йөпләттек;
Ветерандар сығып хупланы,
Пионерҙар менеп ҡотланы.
Киңәйтелгән ҡарар уҡылды,
Уҡылды һәм ҡабул ҡылынды.
Аяғүрә баҫып ҡул саптыҡ,
Оркестрлап гимн уйнаттыҡ.



Йыйылышта ҡабул ҡылынған,
Хужабыҙҙың ҡулы ҡуйылған
Ҡарар төшөп китте түбәнгә:
Йән өрөргә тейеш үлгәнгә,
Күтәрергә тейеш ауғанды,
Алға этеп артта ҡалғанды;
Рух бирергә тейеш кешегә —
Социальный үҙгәрешенә
һәм шулай уҡ тиҙләнешенә!



Бына шундай ҡарар төшөрҙөк.
Бер йүнһеҙен тотоп «өшкөрҙөк»:
һаман насар яҡҡа үҙгәрә,
Күҙ төптәре көн дә күгәрә,
Ауыҙынан яман еҫ килә,—
Был факттар тарта иҫкегә.
һәм таянып Указ көсөнә,
Шелтә сәпәп ҡуйҙыҡ үҙенә!

Хәҙер килеп эштәр көйләнде:
Өсәү араҡыһыҙ өйләнде,
Бишти поминкаһыҙ күмделәр,
Сөнки улар эсеп үлделәр.



Тағы шуны кәрәк әйтергә:
Был үҙгәреш хәрәкәтенә
һәм тиҙләнеш мәнфәғәтенә
Өлөш керттек хатта үҙебеҙ —
(Был тарафтан яҡты йөҙөбөҙ!)

Йөҙөбөҙҙө борҙоҡ халыҡҡа,
Халыҡ менән яҡындалыҡҡа.
Ҡабул итеү ваҡытын үҙгәрттек
һәм һөйләшеү ваҡытын тиҙләттек,
Шуның өсөн бирәү урынына
Хәҙер икәү ҡабул ҡылына...

Шуныһы ла тағы йыуаныс,
Йыуанысҡа өҫтәп ҡыуаныс:
Беҙҙең ҡарар ярҙам иттеме,
Хоҙай йомартланып киттеме,
Йомшаҡ ҡарҙар яуҙы ултырып,
Бөтә баҫыуҙарҙы тултырып,
Иген уңыр инде ҡотороп,
Тормош матурланыр оторо!

Артталыҡты шулай бөтөрҙөк,
Торғонлоҡто тамам үлтерҙек,
Эште тамырынан үҙгәрттек,
Үҙгәртеүгә ҡарап тиҙләттек!

Районда хәҙер бөтәбеҙ
Яңы кампания көтәбеҙ!

А. АНДРЕЕВ һүрәте



— Халыҡҡа яҡынайырға ҡушалар бит.
— Требуют быть ближе к людям.

Йәрмәкәй районы 8 Март исемендәге совхоздың Яңы Шах һөтсөлөк фермаһынан сыҡҡас, беҙ уның хужаһы менән һөйләшмәксе булдыҡ.

Эй, рәхмәт төшкөрө, ана, ашыға-ашыға, үҙе килә ята икән. Ҡыҙыу атлай. Ниҙер һөйләнә. «Үҙгәртеп ҡороу» тиме? Эйе, яңылыш ишетмәгәнбеҙ. Ферма мөдире М. Шәрифуллин һүҙҙе тап шунан башланы.

— Үҙгәртеп ҡороу бара бит, ҡустылар, үҙгәртеп ҡороу! Ана, ҡарағыҙ,— тине ул, стеналағы өңдәрҙе бөтәштергән арҡыс-торҡос кирбестәргә күрһәтеп.— Вентиляторҙар урыны ул. Элек улар, фырылдап, котельныйҙан бина эсенә йылы һауа өрә торғайны. Үҙгәреш индерергә тура килде — беҙ уларҙы алып ташланыҡ. Күрәһегеҙме, хәҙер тишектәр генә беленеп тора. Түшәмдә, люстралар һымаҡ, тамсылар емелдәй. Үҙгәреш...

— Үҙгәреш бар барлыҡҡа, ә бына үҙгәртеп ҡороу?..

— Улайһа, әйҙәгеҙ, арыраҡ китәйек. һауымда ҡулланылған әйберҙәрҙе йыуа торған бүлмәлә элегерәк дезинфекциялау һәм таҙартып йыуыу өсөн махсус иҙмәләр менән ялғаштар бар ине. Хәҙер юҡ. Шунлыҡтан һауынсыларға мәшәҡәт кәмене — уларға һауыт-һаба йыуыу өсөн кальций содаһын туп-тура бидонға һибергә лә, таҙа һыу менән сайҡарға ғына ҡала. Рәхәт эш!

— һауымда ҡулланылған әйберҙәр ошо бүлмәлә һаҡланмаймы ни?

— һөт һөҙгөс марлялар менән һауыу аппараттарын әйтәһегеҙҙер инде. Әлбиттә, һаҡланмай. Үҙгәреш булһын өсөн, беҙ уларҙы һәукәштәр янына күсерҙек. Ана, утлыҡ өҫтөндә, үҙҙәренә тиҙәк еҫтәре һеңдереп, бинаға йәм биреп торалар. Элек һауылған һөт һаҡлай торған бүлмәлә эзбиздең файҙаланылмайынса урын биләп ятыуын да, һөт үткәргестең һүтелеп ташланыуын да беҙҙең үҙгәртеп ҡороуҙағы тырышлыҡҡа индерергә була. Эш күп инде, күп,— тип артабан дауам итте ул.— «Ҡыҙыл мөйөштә» лә үҙгәртеп ҡороуҙы тамамлап булмай әле. Хәҙер унда әйберҙәр туплау менән мәшғүлбеҙ. Телевизор, бильярд өҫтәле эргәһенә лаборатория приборҙарын, самауыр, сынаяҡ кеүек нәмәләрҙе теҙҙек. Әйбер туплау йәһәтенән тракторсылар ҙа ярҙам итте — аккумуляторҙар ултыртып ҡуйҙылар унда. Әммә уларға үпкәбеҙ бар: нишләптер һаман был бүлмәгә тимер-томор ташыуҙы һуҙалар. Тулы үҙгәреш булһын өсөн шул ғына етмәгән кеүек. Улар ҙа булһа, беҙҙең был «ҡыҙыл мөйөш», «лаборатория», «ашхана» тип аталған бүлмәбеҙ һис шикһеҙ склад та була алыр ине...

Шәрифуллин һөйләне лә һөйләне.

Ферма коллективының бригада подрядына күсерелеүе һәм, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштормағанлыҡтан, уның үҙен аҡламауы тураһында ла, һыуыткыс ҡорамалдарҙың, аҙыҡ цехының булмауы хаҡында ла, малсыларҙың былтыр продукция етештереү планын үтәмәүҙәрен дә, түбән сифатлы һөт тапшырыуҙарын да үҙгәртеп ҡороуға бәйләп тәфсилләп һөйләне.

— Быңдай күренештәрҙең сәбәбе ниҙә һуң? һөттөң сифаты быйыл да үҙгәрмәҫме икән ни?— тип, беҙ ферма мөдиренә төбәлдек.

— һе, бөтә сәбәптәрен асып һалдым бит. Тик мин һөйләгәндең айышына төшөнөп, кәрәкле һығымта ғына яһарға кәрәк,— тип, Шәрифуллин һүҙен осланы... тиһәк, ферма мөдире беҙҙе фәстереүҙә ғәйепләр.

Эйе, шуның өсөн дә, Шәрифуллин иптәш беҙгә тап ошоларҙы һөйләне, тип әйтмәйбеҙ. Әммә ул һүҙен нәҡ алдағыса, «үҙгәртеп ҡороуҙан» башланы...

Ә ниңә башламаҫҡа?! Хәҙер бөтәһе лә шул хаҡта һөйләй. Ана, совхоз директоры В. Соколов менән баш зоотехник Х. Шәмсетдиновтарҙың да теленән төшмәй был һүҙ. Тик һүҙҙәре эшкә генә күсмәй.

Ғ. ЯРУЛЛИН,
һәнәктең махсус хәбәрсеһе.

С. СЕМЕНОВ һүрәте



— Ниңә ремонтламайһың! — Почему не ремонтируешь?
— Ҡул етмәй бит. — Руки не доходят.

## Үҙәренсә үҙгәреш



## АҢЛАТҠАНДАР



«һәнәк туған!

Түбәнге Ташлы ауыл Советы башҡарма комитеты председателе Ғ. Вәлиев бер төндә мәктәп тракторы менән «Победа» колхозы баҫыуынан үҙ малына сөгөлдөр алып ҡайтты. Тракторҙы файҙаланған өсөн дә түләмәгән, сөгөлдөр ҡалдығына ла рөхсәте юҡ. Уға эшләмәй алған доходҡа ҡаршы көрәш тураһындағы законды аңлатырға ярҙам итер инең, исмаһам. Кешеләрҙән оят бит: башҡаларға өлгө булыу урынына, ул үҙенең нәфсеһен тыя алмай».

Редакцияға ошондай хат килгәйне. Ул тикшереп сара күреү өсөн Шаран район Советы башҡарма комитетына ебәрелгәйне.

Район эске эштәр бүлегенең сотрудниктары менән агропромышленность берекмәһенең бүлек мөдире Р. Бикчурин мәсьәләне урынға барып тикшергәндәр. Хатта килтерелгән факттар раҫланған. Вәлиевтән сөгөлдөр ҡалдығы кире алынған, мәктәп тракторын үҙ белдеге менән бушлай файҙаланғаны өсөн уға 100 һум штраф һалынған. Ауыл Советы сессияһы харам мал артынан ҡыуа башлаған Вәлиевте башҡарма комитет председателе вазифаһынан бушатҡан.

Район Советы башҡарма комитеты председателе М. Гәрәев иптәш һәнәккә ошоларҙы хәбәр итте.

## БАРЫП ҠАЙТЫУ ТИҘЕРӘК



Бүздәк районының Күҙәй ауылы халҡы , башҡа ауыл йә райондағы берәй ойошма менән һөйләшергә кәрәк булһа, унда барып ҡайтыуҙы мәслихәтерәк күрә, сөнки улай телефонға ҡараганда тиҙерәк тә, ышаныслыраҡ та.

Д. Сәлихов, мәҫәлән, Кушнаренко районының Рәсмәкәй ауылында йәшәүсе А. Дәүләтгәрәев менән һөйләшергә заказ биргән. Телефонға бөтөнләй икенсе кешене саҡырғандар. Ахырҙа ул йомошон Рәсмәкәйгә барып йомошлап ҡайтҡан. Учалынан телефон аша һөйләшергә Сәлиховтың үҙен саҡырып һуғылған телеграмманы ла уға бер тәүлеккә һуңлатып, йәғни һөйләшеү ваҡыты уҙғас ҡына, килтергәндәр.

Был туралағы хат, тикшереп сара күреү өсөн, Башҡорт АССР-ы производство-техник элемтә идаралығына ебәрелгәйне. Идаралыҡтың баш инженеры Н. Леванда иптәштән яуап килде. Телеграммаларҙы ваҡытында тапшырыу сараһын күрмәгән өсөн Күҙәй элемтә бүлексәһе начальнигы Ә. Сәлимова, район элемтә узелы телеграфисткалары М. Булатова һәм В. Вәлитова айлыҡ премиянан мәхрүм ителгән.

Р. СИБАЕВ һүрәте



— Ҡыш сыҡҡансы йөҡара төштәләр...
— За зиму малость отощали...




— **Иртәгәгә тиклем кәрәкле көрләккә еткер — иткә оҙатабыҙ.**
— Смотри, чтобы до завтра набрали положенный вес — отправляем на мясокомбинат.

## ЭЛЕП АЛДЫМ, ҺЕЛКЕП ҺАЛДЫМ

**«ҠИММӘТЛЕ МӨХӘББӘТ»**

**Был фельетонда Федоровка районы «Новая жизнь» колхозы механизаторҙарының төшкөләккә ашарга ла машина, йә трактор менән ҡайтып йөрөүе тураһында яҙылгайны.**

**Фельетон колхоз идараһы ултырышында тикшерелгән, тәнҡит урынлы тип табылған. Хәҙер бригадаларҙа тракторҙарҙы һәм машиналарҙы ҡуйыу өсөн махсус урын булдырылған. Хужалыҡтың бухгалтерияһы һәр водителдең яғыулыҡ-майлау материалын тотоноуына айырым иҫәп алып бара. Уларҙы экономиялаған кешеләргә премия бирелә, ә әрәм-шәрәм иткәндәрҙән артыҡ тотонолған яғыулыҡ-майлау материалының хаҡы түләтелә.**

**Колхоздың үҙәк усадьбаһында быйыл өсөнсө кварталда 40 урынлыҡ автогараж һалынып бөтәсәк. Ул сафҡа индереләү менән, хужалыҡтың бөтә автомобилдәре бер урынға тупланасаҡ.**

**Фельетон буйынса күрелгән саралар тураһында КПСС район комитеты секретары Ф. Аҙнабаева иптәш хәбәр итте.**

# Ал да гөл

Сағыу ҡояштың тәүге нурҙары «Башнефтемашремонт» производство берекмәһенең тимерлек-преслау цехы тәҙрәләренә төштө. Цех начальнигы Р. Сәйетхәлилов кабинетынан сыҡты, эшлекле төҫ менән ҡуйын дәфтәренә күҙ һалды, бинаны ҡәнәғәтләнеү менән байҡаны. Ҡеүәтле престар, бүтән ҡорамалдар тыуып килгән көн яҡтыһында ялт итеп ултыралар ине.

— Тәртип...— тип ҡуйҙы ул һәм выключателгә үрелде. Шалт-шолт!..

Һәр береһе 400-500 ватт ҡеүәтле тиҫтәләгән шәм, сағыу ҡояш менән ярышҡандай, бер-бер артлы балҡып та китте.

— Ни эшләйһегеҙ?!— Берекмәнең баш энергетигы В. Токарев килеп инде, көпә-көндөҙ янған шәмдәргә ғәжәпләнеп ҡараны.

— Бер ни ҙә эшләмәйем. Экономияланған электр энергияһы менән лимит араһындағы айырманы бөтөрәм,— тип яуап бирҙе Сәйетхәлилов. Баш энергетиктың аңламауын күргәс, төшөндөрөп бирҙе:— Берекмәлә, отчет буйынса, үткән йыл 761 мең киловатт-сәғәт электр энергияһы янға ҡалдырылған. Эштәр артабан да шулай дауам итһә, бер нимәгә ҡарамай беҙҙең лимитты киҫеүҙәре бар.

— Туҡта, туҡта!— Баш энергетик уйға ҡалды.— Бик аҡыллы фекер.

— Бына шул-шул.— Сәйетхәлилов ҙур ҡәнәғәтләнеү менән дауам итте.— Бер мин генә түгел, күптәр шулай эшләй. Мәҫәлән, 6-сы цехта ла көпә-көндөҙ йөҙәрләгән шәм балҡый. Уны цех начальнигы С. үҙе контролдә тота. Әйткәндәй, бүтән цехтарҙа ла көндөҙ шәм яндырыу ғәҙәте киң таралған.

— Баш энергетик бүлеге лә төшөп ҡалғандарҙан түгел,— тине Токарев.— Был турала беҙ көҙҙән үк хәстәрлек күрҙек. Цехтарҙы ҡышҡылыҡҡа әҙерләү буйынса ҡыл да ҡыбырҙатманыҡ. Тимерлек-преслау цехындағы ишектәргә иғтибар итегеҙ. Ел уйнап тора. Ишек ярығына ҡул һыймалы. 6-сы цехта ла шул уҡ хәл. Транспорт участкаһының көнкүреш бинаһында, термик участкала... Хатта проходнойҙы ла иҫтән сығарманыҡ. Хәйер, унда ишек ярығы юҡ. Шунлыҡтан беҙ уның пружинаһын ысҡындырып ҡуйҙыҡ. Ябылмаһын, тыштан һалҡын инеп торһон өсөн.

— Йылылыҡ энергияһын экономиялау буйынса берекмәнең эштәре нисек һуң?— тине тимерлек-преслау цехы начальнигы.

— Бында ла эштәр ал да гөл! 1986 йылда беҙ 3228 гигаколорий йылылыҡты янға ҡалдырҙыҡ, тип отчет бирҙек. Быйыл да шунан кәм булмаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, йылытыусы батареялар һып-һыуыҡ беҙҙә. Уның ҡарауы электр менән йылытыусы приборҙарҙың иҫәп-хисабы юҡ. Бына, мәҫәлән, мастерҙар Г. Кашапов менән Р. Сәлимйәновтар янына инеп сығығыҙ. Улар ҡеүәтле электрокамин яндыра. Өшөгән эшселәр, улар янына инеп, йылынып сыға.

Ике етәксе араһындағы әңгәмә ҡыҙа ғына башлағанда, уларға берекмәнең баш металлургы М. Кәримов ҡушылды:

— Иҫегеҙ киткән икән, күпме генә кәпәренһәгеҙ ҙә, йылытҡыс приборҙар йәһәтенән миңә тиңләшеүсе юҡ. Минең участкала 70 киловатлы өс электр мейесе эшләй. Беҙ уның ҡеүәтен 15 процентҡа ғына файҙаланабыҙ. Ике сменала эшләтәбеҙ. Төшөнәһегеҙме?!

Былдай шапырыныу күпме дауам итер ине, әйтеүе ҡыйын. Әңгәмәне халыҡ контроленең ҡала комитеты ағзалары бүлде. Улар эшлекле рәүештә блокноттарына нимәлер яҙа башланы. Быны күреп, өс цех начальнигы берекмәнең генеральный директоры Ф. Гловацкий кабинетына йүгереп килде.

— Флор Онуфриевич!— тине улар.— Саҡырылмаған ҡунаҡтар акт төҙөһә, гәзиткә яҙһа, эштәр мөшкөлләнер бит...

— Тапҡанһығыҙ ҡурҡыр нәмә!— тип ҡул һелтәне генеральный директор.— Беҙ уларға былай тип яуап бирәсәкбеҙ: «Беҙ энергоресурстарҙы экономиялауға алдынғы технология, ҡойоу цехынан моделдәр сығарыуҙы киңәйтеү, тимерлек-преслау цехында ҡорамалдарҙы етештереүсәнле файҙаланыу арҡаһында өлгәшәбеҙ. Әммә энергияны янға ҡалдырыу тулыһынса файҙаланылмай әле. 1987 йылдың 28 ғинуарында яҙылған 62-се номерлы приказ менән ҡышҡа тейешенсә әҙерләнмәгәндәре өсөн С. Воронин, Р. Сәйетхәлилов һәм М. Кәримовтарға шелтә бирелде.» Йә, нисек?

— Баш та һуң үҙегеҙҙә!— тине цех етәкселәре.

— Ә бит мине лә, һеҙҙе лә материаль яҡтан яуапҡа тарттырмаҫтар. Сөнки энергия ресурстарын һаҡсыл тотоноу буйынса яҙылған отчеттарҙа барыһы ла ал да гөл. Ҡалғанын үҙең бел!..

С. КУКЛИН.
Октябрьский ҡалаһы.

**Һәнәк рейды**

# Пар һәм зар

**Һәнәккә йыш ҡына шундай йөкмәткеле хаттар килә: йәнәһе, Өфө мунсалары йүнләп эшләмәй, имеш, улар ҡала халҡын ҡәнәғәтләнерлек хеҙмәтләндермәй, ҡыҫҡаһы, әҙәм балаларына рәхәтләнеп мунса инеү өсөн әле быныһы, әле тегеһе етмәй.**

**Һәйбәт мунсанан пар бөркөлә, ә Өфө мунсаларынан бына шулай зар эркелә.**

Ниңә улай?

Һәнәк был һорауға яуап таба алмай, баш ватып ултырҙы-ултырҙы ла ахырҙа ҡәтғи ҡарарға килде: мунсасыларҙың үҙҙәрен мунса индереп алырға кәрәк!

Ошондай ниәт менән ул Воровский урамындағы 1-се мунсаға килеп керҙе.

— Рәхим итегеҙ, түрҙән үтегеҙ!— тип йылмайып ҡаршы алды уны 3-сө мунса-кер йыуыу комбинаты директоры С. Топилина.— Сисенеп тормағыҙ.

Баҡтиһәң, бында гардеробсы юҡ икән. Шуға күрә мунсаға килеүселәр кейемдәрен йыуыныу бүлмәһендә генә һалалар.

— Мунсабыҙ юғары разрядлы, йәнегеҙ теләгән хеҙмәтте күрһәтә алабыҙ. Бына ҡарағыҙ...— Директор һыу оҙонлоғо исемлеккә төртөп күрһәтте.— Беҙ күрһәткән хеҙмәттәрҙең тәңгә сихәттәре бар!

— Ысынмы?— Һәнәк уға ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне.— Ә бынау фотарий тигән нәмәкәйҙең шифаһы тойоламы һуң?— тип һораны.

— Юҡ, уның кварц лампаһы йүнләп эшләмәй... Ә һеҙ, булмаһа, сабынып алығыҙ.

— Уның өсөн миндек кәрәк.

— Миндек юҡ!— тине кассир С. Шәйхиева һәм үҙе шундуҡ прилавка аҫтынан бер һепертке-не тартып та сығарҙы.— Миндек бар! Етәкселәр һәм тикшереүселәр өсөн генә.

Һәнәк берсә ҡәнәғәт йөҙлө мунса әһелдәренә, берсә сыбыҡтары тырпайып торған һеперткегә ҡарап ҡуйҙы:

— Ошо миндек менән һеҙҙең үҙегеҙҙе сабындырып алғанда шәп булыр ине мәгәр!

— Юҡ, юҡ, һәнәк ағай, беҙҙе сабындырмағыҙ... сөнки беҙҙән хөртәрәктәр ҙә бар.

Һәнәк, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, Чернышевский урамындағы 4-се мунсаға китте. Бында, ысынлап та, эш хөрт икән шул. **(Беренсе фотоға күҙ һалығыҙ.)** Мунсаны тышҡы яҡтан күргәс тә, ҡотоң осор — ҡыйыһы емерелеп, түшәме ишелеп төшөргә тора. Һәнәк тиҙерәк бынан тайыу яғын ҡараны. Мунса мөдире В. Мөхәмәтйәрованы эҙләп тә мәшәҡәтләнмәне.

Ул Зенцов урамындағы 2-се мунсаға ҡарай юл тотто. Һәм туп-тура беренсе разрядлы номерға барып инде. Инһә, күҙе дүрт булды: шул тиклем бысраҡ!.. Өҫтәүенә душ крандары ла ватыҡ.

— Әһә, бына кемдәрҙе миндекләп алырға кәрәк!

— Ашыҡмай тор, һәнәк ағай,— тип ҡаршы төштө мунса мөдире Р. Хәнәфин.— Башта һин 3-сө мунсаны барып күр әле.

Һәнәк, уның кәңәшен тотоп, Коммунистик урамындағы 3-сө мунсаға китте. Былтыр май айында капиталь ремонтҡа ябылған был мунсаны быйыл февралдә генә асҡандар. Асҡандар ҙа — ҡасҡандар. Нимәнән ҡасҡандармы? Яуаплылыҡтан, әлбиттә. Бында ремонт эштәренең насар башҡарылыуы ғына етмәгән, төҙөлөш ҡалдыҡтарын да сығарып түкмәгәндәр хатта. Мунса сүп-сар тауына күмелеп ҡалған. **(Икенсе фотоны ҡарағыҙ.)** Ошондай хәлдәге объектты ҡабул итеү актына санэпидстанция вәкилдәре нисек ҡул ҡуйһын, ти — ҡуймағандар, әлбиттә. Әммә заказсы ла, ремонтсылар ҙа быға ҡарап тормаған — санитария ҡағиҙәләрен боҙоп, әҙер булмаған мунсаны асҡандар.

— Зинһар, һәнәк ағай, хәлемә ин,— тине 1-се мунса-кер йыуыу комбинаты директоры В. Пестов.— Миңә план үтәргә кәрәк бит. Ғинуар планы ла үтәлмәй ҡалды.

— Ғинуарҙа мунсала ремонт эштәре барған даһа.

— Ләкин барыбер беҙгә план бирҙеләр.

— Нисек улай?

— Ә бына уныһын, һәнәк ағай, етәкселәребеҙҙән һора.

Ниңә һорамаһын — һораны Һәнәк. «Восход» производство берекмәһе генеральный директоры Д. Ғәлимйәнов уның һорауына ябай ғына итеп яуап та бирҙе хатта:

— Ремонтсылар ғәйепле, һүҙҙәрендә торманылар, ремонт эштәрен һуҙҙылар.

— Тимәк, уларҙы мунса индереп алырға кәрәк.

Һәнәк «Өфөгорремстрой» тресы (управляющийы В. Аляев) тарафына атланы.

Тик бында ла Һәнәктән миндекләнергә теләүсе табылманы. 1-се ремонт-төҙөлөш идаралығы начальнигы В. Авакумов әсе миндек еҫен танауына яҡын да ебәрмәне:

— Ремонттың оҙаҡҡа һуҙылыуына беҙ түгел, мунсасылар ғына ғәйепле. Тейешле ҡоралдарҙы ваҡытында килтереп еткермәнеләр.

Һәнәк аптырап ҡалды: мунсаларҙағы етешһеҙлектәр өсөн кемде мунса индереп алырға һуң? Ә бәлки, халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү министры Н. Ҡотошов иптәштең үҙендер? Юҡ шул, ул да быға риза булмаҫ. «Мунсалар яңыраҡ ҡына беҙҙең министерство ҡарамағына күсте. Беҙгә уларҙы миллионлаған һум зыян менән тапшырҙылар. Хәҙер был өлкәлә тәрән үҙгәртеп ҡороу бара»,— тип әйтеүе ихтимал.

Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Н. Әминев иптәштең дә яуабын самалап була. «Мунсалар хәҙер беҙҙең министерство ҡарамағында түгел, «Өфөгорремстрой» ҙа ҡулыбыҙҙан ысҡынды»,— тиәсәк. Уларға рәхәт, мунсанан еңел ҡотолдолар. Яңы берекмәнең («Восход») хужалыҡ иҫәбендәге ремонт-төҙөлөш идаралығына план менән хеҙмәт хаҡы фондын ғына күсерҙеләр ҙә — вәссәләм! Яңы идаралыҡтың материаль-техник базаһын булдырыу хаҡында, әйҙә, яңы хужалар баш ватһын!

Халыҡ депутаттарының ҡала Советы башҡарма комитеты председателе Н. Уваров иптәштең әлеге идаралыҡ базаһы өсөн майҙан бүлеп биреү хәстәрлеген күрмәүе күренеп тора. Шул сәбәпле берекмәнең барлы-юҡлы йыһаздары теләһә ҡайҙа таралып-туҙып ята...

Ҡала мунсаларын ҡарап йөрөгәндә Һәнәк күп кенә кешеләр менән күреште. Уларҙың ауыҙынан көнкүреш хеҙмәтендәге үҙгәртеп ҡороуҙар, тиҙләнештәр хаҡында, тиҙҙән яңы мунсалар һалынасағы, иҫкеләренең ремонтланып бөтәсәге тураһында матур-матур һүҙҙәр һәм һандар ишетте. **Һәнәк бер һанға айырыуса ҙур иғтибар бирҙе, сөнки бик бәләкәй һан ине был: Өфөлә йәшәүсе бер мең кешегә 1,2 йыуыныу урыны тура килә. Йәғни нормативта ҡаралғандан өс тапҡырға кәмерәк!**



2.



1.

Быңың өсөн һәнәк кемде ҡыҙҙырып, мунса индерергә тейеш һуң? Кәмселектәргә юл ҡуйған кешеләрҙең бөтәһен дә сабындыра башлаһаң, миндек етмәҫ. Шуға күрә лә Һәнәк уларҙың арҡаһын ҡайын миндек менән сабып түгел, ә осло йәптәре менән ҡашып алырға булды.

Йәнә шуныһы ҡыҙыҡ: һәнәк был иптәштәргә, ғәҙәттәгесә, «еңел пар» теләмәне, сөнки мунса һөйөүселәрҙең зары менән һуғарылған пар үтә лә ауыр ине. Мунса ташы кеүек...

**Һәнәк менән бергә йөрөүсе рейд бригадаһы ағзалары: М. КУПРИЯНОВА — халыҡ контроле ҡала комитетының штаттан тыш инспекторы, Л. СОКОЛОВ, Ә. ТЕРЕГОЛОВ — һәнәктең штаттан тыш хәбәрселәре.**

**Ф. ЙЫҺАНШИН фотолары.**

Рәсих ХАННАНОВ

# Йыуаш Ислам

Хикәйә

Завод директоры сираттағы кәңәшмәнән ҡайтты ла ашығыс рәүештә баш белгестәрҙе кабинетына йыйҙы. Йөҙөнөң ҡыҙарыуына, бармаҡтарының һикергеләүенә ҡарағанда, уға юғарыла арыу ғына эләккән булырға оҡшай ине.

— Беҙҙе дәүләт ҡабул итеүенә кеше тәҡдим итмәгән өсөн теттеләр,— тине директор, ауыр һулап.— Хәҙер үк һайлап ебәрәйек. Берәйегеҙҙең үҙ теләге юҡмы!

Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты.

— Тимәк, теләүселәр юҡ.— Директор берәм-берәм һөҙөп ҡарап сыҡты.— Ярай, һәйбәт белгестәр заводтың үҙенән дә артмай.

— Иң ҡулайы уның — икенсе цех начальнигы,— тине экономист.— Ҡәҙерғолов берекмәгә лә тынғылыҡ бирмәй. Газетаға ла яҙа, халыҡ контролендә лә ҡатнаша. Бер бракты ла үткәрмәç.

— Уның кәмселектәре лә етерлек,— тип ҡаршы төштө план бүлеге мөдире.— Ҡатын айырған, үтә ваҡсыл...

— Бәйләнсек тә,— тип өçтәне баш инженер.

— ОТК начальнигын ҡуйһаҡ!

— Уға теймәйек, ултырған урыны һәйбәт.

— Өсөнсө цех начальнигы хаҡында ни уйлайһығыҙ! Былай арыу егеткә оҡшай.

— Оҡшау ғына етмәй шул, ҡустым. Яңы эшләй башланы. Беҙ беләбеҙме уны! Белмәйбеҙ. Күңелендә әллә ниҙәр ятыуы ихтимал. Үҙ заводының мәнфәғәттәрен күҙәтә белгән кеше кәрәк беҙгә.

— Улай булғас, минең урынбаçарҙы үрләтәйек. Ике һүҙҙең берендә завод маркаһы тураһында һөйләй.

— Завод маркаһы, имеш! Оноттоңмо трансформатор тураһында. Дөрөç списать итмәнеләр, тип кем ялыу яҙҙы!

— Беҙҙә бер кеше бар инде ул барлыҡҡа,— тип, энергетик бармағын шартлатып ҡуйҙы.— Оҡшатмаçһығыҙ тип ҡурҡам.

— Кем!

— Айыҡбаев.

— Рәт сыҡмаç унан. Быҙау.

— Уны эшселәр «йыуаш Ислам» тип йөрөтә...

— Туҡтағыҙ әле.— Директор, ҙур асыш яһаған һымаҡ, урынынан һикереп торҙо.— Иң шәп кандидатура шул үҙе бит, егеттәр! Башын аçҡа баçып ҡына эшләп тик йөрөр. Хәҙер үк үҙен саҡыртығыҙ.

Бер аҙҙан бүлмәгә ҡыçҡа буйлы, утыҙ йәштәр самаһындағы бер кеше инде.

— Әйҙә, ҡустым, уҙ, ултыр,— тине директор. Хәл-әхүәл һорашты.

— Һине дәүләт ҡабул итеүенә билдәләргә булдыҡ. Унда завод намыçын һаҡлаусы кеше кәрәк.

Айыҡбаев оҙаҡҡа һуҙмай ризалыҡ бирҙе.

Ул сығып киткәс, бөтәһе лә иркен тын алды.

— Бына,— тине директор, һөҙөмтә яһап,— эҙләгәнде таптыҡ...

Бер аҙна самаһы ваҡыт тын үтте. Директор шатланып бөтә алманы. Ләкин иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта, тигән һымаҡ, уның ҡыуанысы ҡыçҡа булды. Көндәрҙең береһендә баш инженер йүгереп килеп инде.

— Харап булдыҡ!— тип ҡысҡырып ебәрҙе ул.— Теге бөтә производствоны туҡтатҡан.

— Кем!

— Кем булһын, Айыҡбаев!

— Кем рөхсәте менән!

— Һөйләшергә лә теләмәй. Быға тиклем брак сығарғанығыҙ етте, бүтән улай булмаясаҡ, производствоны өр-яңынан үҙгәртеп ҡорорға кәрәк, ти.

— Ә план!

— Төкөрҙө ул планға!

— Саҡыр үҙен бында!

— Әйттем. Ваҡытым юҡ, кәрәк булһа, үҙе килһен, ти. Квартир менән һатып алырға уйлағайнығыҙ ҙа, ундай кешегә эләкмәнегеҙ, ти, йүнһеҙ!

— Бына һиңә йыуаштан йыуан!

— Ни ҡылабыҙ хәҙер, директор иптәш!

— Эшләргә! Мәсьәләнең ҙурға китеүе ихтимал...

Директор, ут сыҡҡандай, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр продукция етештерелгән цехҡа йүгерҙе.




— Ниңә шул тиклем тоҙ тултыраһың!
— Кисә ул мине «тоҙһоҙ» тип әрләп киткәйне.
— Почему столько солишь?
— Он вчера мне в книге жалоб насолил.

Ю. ГРИГОРЬЕВ һүрәте

РЕПИНСА ТИЕРЛЕК
ПОЧТИ ПО РЕПИНУ




КӨТМӘГӘЙНЕЛӘР...
НЕ ЖДАЛИ...

Мөхәммәт ГАБДРАХМАНОВ

# Ҡаш төҙәтәм тип...

ҠАТНАШАЛАР:
Мәхмүзә
Ғәләүи
Ғариф

Интермедия

**Мәхмүзәләр йорто. Ғәләүи ҡағыҙҙарға күмелеп ниҙер яҙа. Мәхмүзә инә.**

Мәхмүзә. Һаман яҙа. Көнтөн яҙа... Был ниндәй бөтмәç яҙыу-һыҙыу?

Ғәләүи. Мин ерҙәге яманлыҡ менән яғалашам, әсәй. Шуға ҡәләмем түҙмәй... Йәнә бер мәҡәлә. Тәнҡит! Сатира!

Мәхмүзә **(конвертты ҡарай).** Был һинең ҡул түгел, Ғәләүи.

Ғәләүи. Һм... Был ижад эшенең ҡайһы бер нескәлектәре, әсәй... **(Яҙып бөтөрә.)** Ошо конвертты йәһәт кенә йәшниккә һалырға кәрәк.

Мәхмүзә. Һалырмын. Тик тағы ла ялыу яҙа, яла яға, тимәçтәрме?

Ғәләүи. Борсолма, әсәй. Үҙебеҙ яҙғанға үҙебеҙ яуап бирербеҙ!

**Мәхмүзә китә. Ғариф инә.**

Ғариф. Хәйерле көн. Яҙаһыңмы, Ғәләүи ҡустым?

Ғәләүи. Яҙам.

Ғариф. Ҡана, йомошомдо йомошлайым да китәйем...

Ғәләүи. Йә, йә.

Ғариф. Беләһең инде, элекке фронтовик мин. Ғариза яҙғайным, Кавказға путевка бар, тигәс...

Ғәләүи. Путевка тиһеңме?

Ғариф. Эйе, путевка тип түбәне күккә сөйҙөләр шул. Хужаларҙы идарала осратып булмағас, ғаризаны Шәмсиәгә ҡалдыр ҙа кит.

Ғәләүи. Шәмсиә?.. Теге йыйыштырыусымы?

Ғариф. Шул инде, шул. Осҡан ғариза.

Ғәләүи. Былай ғына ҡалдырырға ярамай. Был турала тейешле урынға хәбәр итергә кәрәк.

Ғариф. Ай-һай, Ғәләүи, киçәһең дә ҡуяһың. Шунан ни... Шәмсиә ғаризаны кассирға осорған. Кассир тигәнебеҙ ҙә ғаризаны осорған.



Ғәләүи. Бюрократтарҙан ниндәй изгелек көтөргә мөмкин... Гәзиткә сәпәйем үҙҙәрен! Ғибрәт өсөн.

Ғариф. Яратам тәүәккәл кешеләрҙе. Тик, Ғәләүи, ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарып ҡуйма.

Ғәләүи. Төбө-тамыры менән йолҡоп ырғытабыҙ! Тәк, тәк... Ғариза кассирҙа тинеңме әле?

Ғариф. Кассирҙа ине. Шул ғариза ураү-ураү юлдар менән башбухтың үҙенә барып ҡунаҡлаған.

Ғәләүи. Башбух! Илдус Ғәлиевич! **(Яҙа.)** Бик ҡабаланма, Ғариф ағай: авторучка буксовать итә.

Ғариф. Ә башбух ғаризаны кәйелтеп тә ебәргән. Барып таптым ҡағыҙ киçәген... Ҡайҙан тиһеңме? Председатель бүлмәһенән!

Ғәләүи. Ирек Ғәббәсовичтан, тимәк! Ай-һай-һай...

Ғариф. Ғәжәп тә инде. «Председатель,— мин әйтәм,— курорт мәсьәләһендә ярҙам ит». Ҡырын күҙе менән бер ҡараһа, исмаһам. Вәт әҙәм!

Ғәләүи. Бына кемде гәзиткә сәпәргә!

Ғариф. Тороп тор. Шунан председатель путевканы өçкә ебәргән.

Ғәләүи. Гәзиткә сәпәргә!

Ғариф. Уныһы шулай ҙа, уйлашырға кәрәк.

Ғәләүи. Әллә шөрләйһеңме, Ғариф ағай?

Ғариф. Һаҡ тотонорға кәрәк. Донъя ҡуласа, әйләндереп килеп баçыуы мөмкин.

Ғәләүи. Юҡ, яҙырға! Сәпәргә!

**Тынлыҡ. Ғариф ҡапыл көлөп ебәрә.**

Ғариф. Һай, ҡустым, ҡустым, мин һынап ҡарарға теләнем һине. Һынап ҡарарға!..

Ғәләүи. Нисек?

Ғариф. **(кеçәһенән алып).** Бына ул путевка! Бер тотҡарлыҡһыҙ бирҙеләр. Һәммәһе «аһ» итеп торҙо. Хеҙмәт иткәндең хөрмәте ҙур.

**Мәхмүзә инә.**

Мәхмүзә. Бына, улым, ниңәлер шикләндем дә һалманым хатыңды.

Ғариф **(ҡарап).** Сираттағы анонимка, Мәхмүзә.

Мәхмүзә. Эй, улым, улым... Үсләшеп, яҡшылыҡ эшләп буламы ни?!

Ғәләүи. Мин — клуб мөдире, культура хеҙмәткәре!

Мәхмүзә. Өндәшмә, исмаһам. Ана, Ғариф ағайыңды тыңла.

Ғариф. Эйе, Ғәләүи, кәңәш бар һиңә, кәңәш. Әйҙә минең бригадаға. Йорттар төҙөрбөҙ, ферма һалырбыҙ... Кешеләргә изгелек итеүҙән дә ҙур эш юҡ донъяла.

Мәхмүзә. Оло кешенең һүҙе-мең алтын, улым. Рәхмәт әйт тә Ғариф ағайыңа, атла артынан. Өйрәтерҙәр, ярҙам итерҙәр.

Ғариф. Әлбиттә. Путевкаһын да бүлербеҙ.

Ғәләүи. Путевка?

Ғариф. Эйе, берәй төҙөлөшкә комсомол путевкаһы бирербеҙ. Нервыларыңды нығытып ҡайтырһың. Анонимкалар яҙыу мәшәҡәтенән дә ҡотолорһоң.




— Мастер, был телевизорҙың ниңә эшләмәгәнен шайтан ғына белә, тине.
— Мастер сказал, что черт знает, почему он не работает.

# ИҪЕРЕК СУСҠА

Булғанмы бындай хәл, юҡмы — өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын, сөнки ҡайһы бер хәбәрҙәр халыҡ телендә борсаҡ кеүек бүртеп тә киткеләй. Әммә ләкин, «утһыҙ төтөн булмай» тигәндәй, Ауырғазы районының ҡайһы бер ауылдарында, әйтәйек, Юламан урамдарында, иҫерек сусҡа күренеүе тураһында хәбәр йөрөй.

Ҡаты морон ул былай үҙе инсафлы ғына хайуан. Ә инде иҫерҙеме, ысын сусҡаға әйләнә лә ҡуя. Юламан ауылы урамдарында аҡты ҡаранан айырмайынса тулап йөрөй икән был. Етмәһә, ятып аунарға бысраҡ таптыра, ти. Ә ҡыш көнө уны ҡайҙан табаһың?

Әлбиттә, ҡаты морондоң сусҡа хәленә төшөүенә һис тә ул үҙе гәйепле түгел. Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ, тип йәшәгән ҡайһы берәүҙәрҙең мутлығы тайғаҡ юлға баҫтыра икән уны. Шундай бәғзе бер бәндәләр, йәмғиәтебеҙ закондарын һанға һуҡмайынса, намыҫтарын юғалтып, мейес башына йәки кәбәркәгә бал ҡойоп ҡуялар ҙа өҫтөнә һалам һалалар икән. Йәнәһе, сусҡаға ризыҡ. Милиция килеп инһә, балды тиҙ генә ҡаты моронға сығарып һалалар. Бына шунан инде иҫерек сусҡа пәйҙә була.

Ә Мичурин исемендәге колхоздың Манеево ауылынан Е. Иванова үҙенең мейес башында ултырған 25 литр балына һалам һалып өлгөрә алмай ҡала. Тикшереүселәр менән әңгәмә ваҡытында шул асыҡлана: Елена Николаевна өйҙә бал ҡойоу, самогон ҡыуыу кеүек харам эштәр өсөн баштан һыйпамаясаҡтарын яҡшы белә икән. Был турала уға атаһы Захаров та әйткән: «Ай-һай, ҡыҙый, ут менән шаяраһың»,— тигән, имеш. Ҡыҫҡаһы, Елена Николаевна атаһын тыңламай харап була. Тыңларға кәрәк ине, әлбиттә. Сөнки уның атаһы ауылдың мөхтәрәм кешеләренең береһе — иптәштәр суды секретары икән.

«Ниңә атай һүҙен аяҡ аҫтына һалып тапай торған ҡыҙ үҫтерҙең?»— тигән һорауҙы әҙерләп, тикшереүселәр Николай Ивановичтың өйөнә юл тота. Унда барып инһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр... мейес башында — дүрт биҙрә баллы мискә! Ата менән ҡыҙға ҙур ғына штраф түләргә тура килә.

Юламан ауылында иһә Игнатьевтар ғаиләһендә ҡатын ирен тыңламағанмы, әллә ир — ҡатындымы, быныһына төплө генә яуап биреү ауыр. Әммә шул асыҡ: уларҙың квартирынан самогон аппараты менән өс фляга бал килеп сыҡҡас, йорт хужаһы бөтә гәйепте ҡатынына — колхозда һауынсы булып эшләгән Римма Парамоновнаға өйә башлай. Йәнәһе, ул үҙе уңған колхозсы, коммунист, унда гәйеп юҡ. Римма Парамоновна ла хәйләгә маһир кеше икән.

— Үҙебеҙ өсөн ҡоймайыҡ. Йорт ремонтларға йыйынабыҙ,— тине ул.

Быны хәйлә икәнлеге шунан асыҡ күренә. Юламан ауылын үҙ эсенә алған «Правда» колхозы етәкселәре лә, шулай уҡ Ауырғазы районының башҡа хужалыҡ етәкселәре лә халыҡҡа утын-бесән килтерергә транспорт бүлә, йорт һалырға, ремонтларға ярҙамлаша, башҡа төрлө хеҙмәттәр күрһәтә.

Ә мейес башындағы мискәләр иһә, әҙәм балаһын кешелектән сығарып, әлеге сусҡалар хәленә ҡалдыра.

Р. ГУСАМОВ.

С. ФӘЙЕЗОВ һүрәте




С. ҒӘЛЛӘМОВ һүрәте



**Ришүәтсе портреты**
Портрет взяточника

# ЙОМАРТЛЫҠ



**Йомартлыҡҡа ни етә! Кешене биҙәй торған күркәм сифаттарҙың береһе бит ул.**

**Ирле-ҡатынлы Рима һәм Фәнил Шакировтар Мәләүез ҡалаһында өс бүлмәле квартирҙа йәшәне. Бер нисә йыл элек, майҙандарын бронләп, договор нигеҙендә Себергә эшкә китте. Йомартлыҡҡа ни етә! Йәшәр мөйөштәре булмаған ғаиләләр, яңғыҙаҡтар ваҡытлыса рәхим итһендәр, бер айырым бүлмә бар бит. 1981 йылдан алып 1986 йылға тиклем, шулай итеп, дәүләт квартиры Шакировтар кеҫәһенә йомарт ҡына табыш килтерә. Сөнки квартиранттар тотош квартир өсөн, йәнә коммуналь хеҙмәтләндереү өсөн һәүетемсә түләп тора, өҫтәүенә хужаларҙың йомартлығын ваҡыт-ваҡыт «баһаларға» мәжбүр була. Әлбиттә, аҡса менән. Мәҫәлән, Йәрмөхәмәтовтар — 180, Шахмаевтар — 200, Серова — 400, Муклеева 220 һумға...**

**Берҙән-бер көндө Шакировтарҙың «йомартлығы» прокуратура работниктарын да ҡыҙыҡһындыра башлай. Һөҙөмтәлә суд... Йомарт хужаларға 100 һум штраф һалына, һәм харам табыш сығанағына әйләндерелгән әлеге айырым бүлмә дәүләт ҡарамағына ҡайтарып алына.**

**Йомартлыҡ тигәндәй, тир түкмәй генә байыу өсөн ҡайһы берәүҙәр хатта хәләл ефеттәренән дә йомарт рәүештә ваз кисәләр. Ундайҙар РСФСР Торлаҡ кодексының 73-сө статьяһын белмәмеш тә күрмәмеш булып ҡылана. Законда асыҡ әйтелгән: әгәр торлаҡ алмашыу үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыуҙан сығып эшләнһә, торлаҡ алмашыуға юл ҡуйылмай, суд алмашыуҙың ялғанлығын иҫбатлаһа, дәғүәселәр элек йәшәгән торлаҡтарына ҡабат ҡайтарыла. Өфө ҡалаһының Калинин район халыҡ суды ҡараған ғибрәтле хәл тап бына ошондай.**

**Т. Тычинина менән В. Тычинин 1985 йылдың 14 мартына тиклем законлы никахта донъя көтәләр ине. 26 майҙа кинәт кенә айырылыштылар. Әлбиттә, юрый ғына. Шунан Тычинина аҙна үтеү менән Г. Митякинға «кейәүгә сыҡты». Күңеле йомарт бит, яңы «иренең» туғандары өсөн өҙөлөп кенә тора. Г. Митякиндың һеңлеһен, һуңыраҡ ҡәйнәһен ҡасандыр үҙенә**



**бирелгән бер бүлмәле квартирға пропискаға теркәй, ә үҙе, законлы рәүештә айырылһа ла, В. Тычининдың квартирынан сыҡмай. 1986 йылдың 4 мартында Митякиндан законлы рәүештә «айырылып ҡайта». Был мутлыҡ төшөмлө була: Тычининдар кеҫәһенә 4800 һум аҡса инеп ята. Тик оҙаҡҡа түгел. Үрҙә телгә алынған статья нигеҙендә был табыш та, табыш килтергән квартир ҙа дәүләт ҡарамағына күсерелә.**

**Йомартлыҡ кешене биҙәй. Әммә йомарт булып ҡыланыу — уны боҙа.**

Б. ЛАТИПОВ,
Башҡорт АССР-ы Верховный суды председателе урынбаҫары.




# «БАШТЫ ҠАТЫРМА ӘЛЕ!»

Гәли бөгөн дә мәктәптән иртә ҡайтты. Ике дәрес уҡынылар ҙа тайҙылар. Таймаҫтар ине — уҡытыусы ағалары туңды. Таҡтаға яҙайым тиһә, яҙа алмай, һөйләп аңлатайым тиһә, иренен ҡыбырҙата алмай. Мейескә арҡаһын терәй ҙә туҡтауһыҙ ҡулдарын ыуа. Йылынырһың улай ғына! Ана, бүрәнә араларында — бүре инерлек ярыҡтар! Эй, бүре инә буламы, башы икеме әллә уның?! Бер сәғәт ултырһын был класта — танауыҡойроғо менән ҡатыр. Ә Гәлиҙең уҡытыусыһы һәйбәт. Ҡатырға ирек бирмәй. «Күгәрештегеҙ, балалар, аҙыраҡ көрмәкләшеп алығыҙ»,— ти. Балалар рәхәтләнеп көрмәкләшә. Тик бик шашып китергә лә рөхсәт юҡ. «Артығын ирәймәгеҙ, улайһа теге бүлмәгә ябып ҡуйырмын»,— тип ҡурҡыта. Шунда уҡ шым булалар. Ул бүлмәгә әләгергә яҙмаһын берәү! Әле ҡасан ғына дәрестә өрлөк шатыршотор килә башлағас, саҡ сығып ҡотолғайнылар. Терәү һалып, биктә генә торалар хәҙер. Яҡмайҙар ҙа. Яғыуҙан ни файҙа! Тышты йылытырға ҡайҙан утын еткермәк кәрәк! Ҡыш бик һалҡын булһа ла, класта түҙерлек әле — 4 градус йылы...

Гәлиҙең шомло уйҙары шунда бүленде. Атаһы ҡайтып инде.

— Йөҙөңдән үк күрәп торам, бөгөн «бишле» әләктерә алмағанһың. Иртән аҙ ашағайның шул. Күтәреп алып ҡайтырға көсөң етмәгәндер — тине ул, шаяртып.

— Берҙе әләктергәйнем...

— Ҡайҙа, ҡайҙа, күрһәт әле көндәлегеңде!— Атай кеше әҙмәне лә ҡуйманы.

— Көндәлектә юҡ шул, атай. Уҡытыусы ағай үҙенең журналына ла ҡуя алманы әле. Ручкаһының ҡараһы туңды. «Көндәр йылытҡас, көндәлегеңә ҡуйырмын»,— тине.

— Ярай, алған «бишлең» әллә ҡайҙа китмәҫ. Ҡыш килә лә китә ул. Көндәр йылынһа, мәктәбегеҙ ҙә йылыныр әле.

— Атай, беҙҙең мәктәп ниндәй мәктәп тип атала?— тип һорап ҡуйҙы малай шул саҡ.

— Бынағайыш, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ. Дәфтәр тышыңа ҡара, унда нимә тип яҙҙың һуң? «Благовещен районы Иҫке Илек һигеҙ йыллыҡ мәктәбе» тип үҙең яҙманыңмы ни! Һи, икенсе класта уҡып йөрөгән булаһың тағы!— Атай кеше асыуланырға уйлағайны ла, нимәнәлер иҫенә төшөрөп, тиҙ үк туҡтаны.— Хәйер, был бинаның ҡасан һалыныуын әйтеүе лә ҡыйын. Ул бит илленсе йылда уҡ иҫке йорттарҙан ҡороштороп ҡуйылғайны.

— Атай, беҙҙең ауыл ҙур бит. Ниңә ун йыллыҡ яңы мәктәп һалмайҙар һуң?— тине малай, ғәжәпләнеп.

— Уныһын инде һинең менән минән һорап тормайҙар. Әллә ҡасан уҡ һөйләй башлағайнылар яңы мәктәп һалыу хаҡында. Һүҙҙән ары китә алмайҙар. Инде күпме ремонтлап та ҡаранылар. «Иҫкегә теймә — иҫең китер»




типме, хәҙер ремонтларға ла ҡушмайҙар. Ярты бүрәнәһенә ҡағылыу менән емереләсәк. Әле йыл башында ғына РОНО-нан тағы бер комиссия килеп, акт төҙөп киткәйне. «Мәктәп бинаһы артабан файҙаланыуға ярамһыҙ» тип аҡҡа ҡара менән яҙылған унда, белгең килһә!

— Ярамһыҙ мәктәптә уҡырға ярамай ни, атай?— тип ярамаған һүҙ ҡыҫтырҙы малай.

— Башҡаһы булмағас, ҡайҙа бараһың!— Атай кеше асыуланырға самаланы.— Әллә, һигеҙенсе класты бөтергән ағайҙарың кеүек, күрше Биштин ауылына биш километрға сабыр инеңме?

— Уға тиклем яңы мәктәп төҙөлөп бөтәр әле, атай,— тине малай, ышаныслы итеп.

— Белмәйем, белмәйем, — тип икеләнде атаһы.— Райсовет, «аҡса юҡ» тип, төҙөлөштө быйылғы йыл планына ла индермәгән, киләһенә лә билдәһеҙ , тиҙәр.

— Ә ул райсоветтың директоры кем һуң, атай?

— Директоры булмай, председателе була. М. Имамғаязов ағайың ул. Ниңә кәрәк ул һиңә? Бар, башты ҡатырма, дәрестәреңде әҙерлә!

Ата менән баланың һөйләшеүе шунда өҙөлдө. Тик малайҙы борсоған уй өҙөлмәгәйне әле. Уның тағы бер нәмәне асыҡлайһы бар ине. Ул яҙҙы күҙ алдына килтерә: ярамһыҙ мәктәп класында ултырған малайҙың башына тып та тып тамсы тама. Уныҡына ғына түгел. Серек түшәм аҫтында ултырған 104 ҡыҙ һәм малайҙың түбәһенә лә тама. Яҙ көндәрендә һәммәһе лә бүректәрен һалмай ултыралар. Ә район Советы башҡарма комитетында эшләүсе иптәштәрҙең баштарына таммай. Уларға рәхәт. «Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына таммаһа...» тигәндәре шул булалыр инде. «Таммаһамы», «төшмәһәме»? Нисек әйтелә һуң әле? Был хаҡта атаһынан һорарға уҡталып ҡарай ҙа ҡарауын Гәли, ҡыймай шул, «башты ҡатырма әле!» тип әрләүенән ҡурҡа.

**Р. ИДИӘТУЛЛИН,**
**һәнәктең махсус хәбәрсеһе.**

---

Ю. ЕРЕМЕЕВ һүрәте



**— Һуғып ҡына ҡара — өҫтөңдән яҙып ебәрермен!**
— Попробуй только — жалобу напишу!

Фәүзиә РӘХИМҒОЛОВА

## ӨЙГӘ ЭШ




**Юмореска**

Ял көнө ине был. Бикмәттең башы ауыртыбыраҡ тора ине тороуын, әммә ул икенсе класта уҡып йөрөгән малайының дәфтәрен алып ҡарарға булды. Улай тигәс тә, атай кеше бит, ярты йыл уҙып китте, ә һаман балаһының нисек уҡыуын күҙҙән уткәрергә форсат тапмай.

«Ҡара һин уны, ә, нисегерәк һырлаған! Былай, яҙыуы матур ғына шалапайҙың, үҙемә оҡшаған. Заманында мин дә арыу ғына яҙа инем дә ул, тик ана шул хәреф хаталары ғына маҙаһыҙлай торғайны...»

Атай кеше ҡапыл тынып ҡалды. Хата ебәреү яғынан да малайым үҙемә оҡшамағайы тигәндәй, бөтә иғтибарын йыйып, дәфтәрҙәге яҙыуға текәлде. Тик, туҡта әле, ниңә һуң Бикмәт, ҡыҙарып-бүртенеп, урынынан һикереп торҙо?

— Мин ул малайҙы! Мин ул хулиганды!

Бикмәт ялан өҫ, ялан баш көйөнсә, галош ҡына өҫтөрәп, урамға атылды. Күп тә үтмәй, ҡото алынған улын ҡолағынан тартып алып та инде:

— Кем ҡушты һиңә дәфтәр бите тултырып насар һүҙҙәр яҙырға, ә?! Һинең һүҙҙәрме былар?!

Малай атаһының һорауына ҡурҡа-ҡурҡа яуап бирҙе:

— Юҡ, минеке түгел — һинеке, атай. Уҡытыусы апай атайҙарҙың эштән ҡайтҡас һөйләгән һүҙҙәрен яҙып алып килергә ҡушҡайны. Ул бит өйгә эш!

Буранбай ИСҠУЖИН

# ЕМЕРТӘБЕҘ

**Юмореска**

Мин, еңелерәк, рәхәтерәк эш эҙләп, өс йыл самаһы йәш ғүмеремде заяға үткәргән кешемен. Бәлки, берәйһенә файҙаһы тейеп ҡуйыр — һөйләйем әле шул турала.

Официант булып эшкә төшкәйнем. Тәүге аҙна аҙағында шул тиклем хәлдән тайҙым, буш батмусты күтәрерлек тә көсөм ҡалманы. Өйгә ҡайтып етерлек тә әмәлем юҡ икәнен күргәс, айнытҡысҡа ебәреп йоҡлатып сығарҙылар.

Бер аҙҙан дөйөм ятаҡҡа вахтер итеп алдылар. Тәүҙә егеттәр ятағында эшләп, эш күрһәтеп алғас, ҡыҙҙар ятағына күсерҙеләр. Ир-ат халҡын индерергә ҡушмаһалар ҙа, йомшаҡ күңелле кеше булараҡ, бер егетте лә ҡыҙҙар янына индермәй интектермәйем. Почет күтәрелде китте ағағыҙҙың! Йома һайын ЗАГС-ҡа, шәмбе һайын туйға саҡырып ҡына торалар. Ләкин минең баш ҡоҙа булып йөрөүҙәрем комендантҡа оҡшаманы. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, үҙем ялҡтым көн дә булып торған байрамдарҙан. Наркология бүлегенә эләкмәҫ борон тип, ҡастым был эштән.

Ошо рәүешле еңел эш табыу маҡсатында йөрөп, кәмендә ҡырҡ туғыҙ урын алмаштырғанмындыр. Пожарниклыҡтан — бер янғын ваҡытында үҙем янып китә яҙған өсөн, ҡарауылсылыҡтан — мылтығымды урлатҡан өсөн ҡыуып сығарҙылар. Һәммәһен һөйләй башлаһаң, китапҡа ла һыймаҫ.

Шулай аңҡы-тиңке булып йөрөгән саҡта бер күренешкә иғтибар иттем: төҙөлөп ятҡан балалар баҡсаһының төҙөүселәре күҙгә күренеп ҡарая башланылар. Араларында таныштарым да булғас, был ғәжәйеп хәлдең сәбәптәрен һорашырға булдым.

— Юҡҡа иҫең киткән икән,— тине ташсы егеттәр.— Көнө буйы ҡояшта ҡыҙынып ятып ҡара әле, тышың ғына түгел, эсең дә ҡарайыр. Йә кирбес юҡ, йә иҙмә юҡ, йә икеһе лә юҡ. Икеһе лә булһа, беҙ үҙебеҙ юҡ...

Шул минутта уҡ төҙөүсе булырға ҡарар иттем. Әле лә үкенмәйем, йәй буйы ҡояшта ҡыҙынабыҙ. Йыл эсендә домино һуғып өс өҫтәл ҡырҙыҡ, ун бер ҡап кәрт туҙҙырҙыҡ, ете мискәгә яҡын һыра бөтөрҙөк... Емертәбеҙ генә!

Пенсияға сыҡҡас та ҡалырға уйлайым әле ошо һөйөклө эшемдә.

Ю. ЕРЕМЕЕВ һүрәте



П. ВӘЛИЕВ һүрәте






З. ҒАЯНОВ
һүрәте

— **Ниндәй яңылыҡтар бар!**
— **Диктор яңы күлдәк кейгән.**
— Какие новости?
— У диктора новое платье.

Яҡуп ҠОЛМОЙ

## Төн һәм шәм



**Мәҫәл**

**Шәм ҡыуанды,**
**Атылғанын күргәс йондоҙҙоң,**
**Был бәләне көткәйне ул иртәрәк:**
**— Күктә,— ти ул,— яҡты сәсеп күп торҙоң,**
**Етте, ут күҙ, һиңә күптән шул кәрәк!**

**Йондоҙһоҙ Төн йәйеп ҡара ҡанатын,**
**Мыҙлаҡ шәмгә әйтте йөрәк яраһын:**
**— Шашып ҡал,— ти,— ваҡытың аҙ янырға,**
**Аңла үҙең, күп ҡалманы майың да.**



* * *

**Беҙҙә лә бар тар күңелле кешеләр —**
**Һуҡырайып мыҙлаған Шәм ишеләр.**

Будкин бик тәмле төш күреп ята ине. Имеш, ул үҙенең дуҫтары менән бергәләп шарап магазинынан сығып килә... Шул саҡ телефон шылтыраны.

— Тыңлайым,— тине Будкин ҡарлыҡҡан тауыш менән.

— Алло, Будкин иптәшме был?

— Эйе.

— Эдуард Иванович, был мин — Зайкин.

— Ә-ә...— Будкин, асыуланып, ауыҙ эсенән мығырҙаны.— Ниндәй шәп төштө бүлдерҙе, ҡәһәрең!

— Ғәфү итегеҙ, Эдуард Иванович, һеҙҙе борсорға тура килде...

— Туҡта, туҡта,— тине Будкин, башы әйләнеп.— Бөгөн ниндәй көн әле?— Ул өҫтәлдәге календарға ҡарап алды.— Әһә, беренсе апрель. Тимәк, көлкө көнө...

— Ә мин етди эш менән,— тине Зайкин.

# ШАЯРТЫУ

**Юмореска**

— Етди эш, тиһеңме?

— Тап шулай!

— Ә үҙең мыштым ғына көләһең түгелме?

— Һеҙ нимә?.. Көлөрлөк эшме ни был!

— Ә ниндәй эш һуң?

— Һеҙҙе премияһыҙ ҡалдырҙылар.

— Премияһыҙ? Кемде, минеме?

— Эйе, һеҙҙе, Эдуард Иванович.

— Ха-ха! Ну, шаяртаһың, Зайкин! Йәйә, алда, әйҙә!

— Өҫтәүенә һеҙгә шелтә лә сәпәнеләр.

— Шәп ултыртаһың, Зайкин, молодец!

— Ҡаты шелтә.

— Хи-хи-хи, вәт әйттең!

— Тағы бер тапҡыр прогул яһаһағыҙ, һеҙҙе эштән ҡыуасаҡтар.

— Шул тиклем оҫта шаярта беләһеңдер тип башыма ла килтермәгәйнем, Зайкин. Ну, талант!

— Ә мине һеҙҙең урынға ҡуйҙылар.

— Һине?! Ха-ха-ха!.. Ой, үләм!.. Эсемде ҡатырма әле, Зайкин. Етте, етте! Ташла шаяртыуыңды!

— Мин шаяртмайым, Эдуард Иванович

— Нисек инде шаяртмайһың? Бөгөн бит беренсе апрель!

— Яңылышаһығыҙ, бөгөн өсөнсө апрель.

— Ә?! Нимә? Шаяртыу ғына булманымы ни был?

Яуап урынына трубкала «тү-тү-тү» тигән тауыштар ғына ишетелде.

И. КАЛИНИН

Рәшит БАСИМОВ

## ЫНТЫЛЫШ



Белемгә өндәйҙәр уны,
Көн дә тиерлек туҡып:
— Ынтыл һәр саҡ яңылыҡҡа,
Күберәк китап уҡы!

Фәлсәфәһе уның ябай —
Ул башҡаға ынтыла:
— Ни саҡлы әҙерәк белһәң,
Шул саҡлы әҙ онотола...

●

Муса СИРАЖИ

## БИРЕШМӘ!



Өйгә ҡайнар һыу килмәгәс,
Барҙым бер көн мин ЖЭК-ка
Техник-ҡараусы, баш сайҡап:
— Йөрөйһөгөҙ,— ти юҡҡа,—
Элек әле һыуға һәр кем
Барыр булған ҡойоға,
Быңдай эҫе һыуҙы хатта
Килтермәгән уйына...

Ҡайтһам, ут һүнгән. Монтерға
Шылтыратам:
— Кур сара.
— Нисауа,— ти,— элек әле
Яндырғандар тик сыра...

Көтәм өс көн, килмәй һис кем,
Ауырта баш һәм йөрәк.
Ҡатын әйтә:
— Өйгә доктор
Саҡыртырға,— ти,— кәрәк.

Ҡаршы киләм. Үҙ-үҙемә:
— Түҙ,— тим,— бирешмә һис тә.
Элек утыҙҙа үлгәндәр,
Ә һин бит ҡырыҡ биштә!
Көт, түҙ, бирешмә һис тә!..




— Беҙ һинең менән тығыҙ бәйләнештә.
— Мы связаны крепкими узами.

С. ГОЛДОБИН
һүрәте



### ОҘОН ҺҮҘЕҢ ҠЫҪҠАҺЫ

● *Күп ашап та аҙ йәшәргә мөмкин.*

● *Ышыҡтағы бәндәнән куләгә төшмәй.*

И. РИМЗИН.

● *Йөгә еңел ат алға сығыусан.*

● *Һарыҡтың араlығына бүре бошонмаҫ.*

Ғ. САДИҠОВ.

В. АДЕЕВ
һүрәте




Офицер яңы хеҙмәт итә башлаған моряктан һорай:
— Һеҙ Ҡушма Штаттар хәрби-диңгеҙ флотында хеҙмәт итеүегеҙ менән бәхетлеһегеҙме!
— Эйе, капитан әфәнде!
— Ә хәрби хеҙмәткә тиклем нисек йәшәнегеҙ!
— Унан да бәхетлерәк, капитан әфәнде!

●

— Һине тиҙҙән өйләнә тиҙәр, Свенссон!
— Белмәйем инде, белмәйем. Бурыстарымды түләп бөткәнсе кәләшем миңә кейәүгә сығырға теләмәй. Ә мин уға өйләнмәйенсә бурыстарымды түләй алмайым.

●

Йылғала, ярҙам һорап ҡысҡыра-ҡысҡыра, бераү бата.
— Ҡайҙа йәшәйһегеҙ!— ти үтеп барыусы.
— Темпель урамы, 25. Ҡотҡарығыҙ!
— Исемегеҙ кем!
— Пьер Дюпон. Үтенеп һорайым, мине һыуҙан тартып сығарығыҙ!
Үтеп барыусы батып барыусы әйткән адресты эҙләп таба:
— Мин әле генә йылғала батып үлгән Дюпондың фатирын һорарға килдем.
— Һеҙ һуңға ҡалдығыҙ,— ти хужа.— Фатирға Бюбо әфәнде инде.
— Кем ул!
— Дюпон әфәндене йылғаға төртөп төшөргән әфәнде.

●

Ҡушма Штаттарҙың ҡырағай көнбайышында ковбой барға виски эсергә инә һәм пианино өҫтөндә «Пианисҡа атмағыҙ, ул хәленән килгәнсә уйнай» тигән яҙыу күрә. Уйын ҡоралы эргәһендәге урын буш икән.
— Пианист ҡайҙа!— тип һорай ковбой официанттан.
Официант көрһөнөп яуап бирә:
— Кисә бында уҡый-яҙа белмәгән ковбой булып киткәйне.

●

Ике американ донъя хәлдәре тураһында әңгәмә алып бара.
— Латин Америкаһында хәлдәр үҙгәрҙе,— ти береһе.
— Эйе,— ти икенсеһе.— Элек был илдәргә АҠШ-тан рәсми вәкилдәр килеү күңелле комедия була торғайны, ә хәҙер ҡызғаныс драмаға әйләнде.

●

Чикагола маҡтай-маҡтай гангстерҙы ерләйҙәр.
— Уның хаҡында ни генә тимәһендәр, шәп кеше ине!— ти береһе.
— Уның револьверы сәпкә тура ата ине.
— Ә бысағы ниндәй үткер ине!
— Банк сейфтарын унан да тиҙерәк асҡан кеше юҡ ине!
Шул саҡ гангстерҙың ҡатыны илап ебәрә:
— О, ике йөҙлөләр,— ти ул.— Ә ниңә исән сағында берегеҙ ҙә уны маҡтаманы!

Был һандағы һүрәттәр Х. Айтуғанов, А. Андреев, С. Голдобин, Ю. Григорьев, Ю. Еремеев, И. Крещенов, Ғ. Мирғәсимов, В. Павлов, Д. Самохин, С. Сәмиев, В. Фадеев темалары буйынса эшләнде.




Ихсан ӘХТӘМЙӘНОВ

# БЕРЕНСЕ АПРЕЛЬ

Беренсе апрель — алдау көнө—
Бер кемгә лә ышанмаҫҡа.
Дуҫ саҡырһа, осрашмаҫҡа,
Ҡыуанмаҫҡа, йыуанмаҫҡа.

Кем тапҡандыр был йоланы!
(Мут кешенең эше инде).
Минең иһә бар шатлығым
Ошо көнгә тура килде.

Беренсе апрель — тыуған көнөм,
Быға нисек ышанмайһың!
Мисәт һуҡҡан танытмам бар,
Ҡаршы бер һүҙ ҡушалмайһың.

Тура килһә, килә икән:
Был көн тәү ҡат ғашиҡ булдым.
Үҙ-үҙемде мин оноттом,
Донъяға мин ҡабат тыуҙым.

Тура килһә, килә икән,
Үҙем хәҙер хайран ҡалам:
Тап беренсе апрель көндө
Тыуҙы минең тәүге балам.

Инде йәнә бер мөғжизә —
Һуштар китер бындай хәлгә:
Ейәнсәрем донъя күрҙе
Апрель айы тыуған мәлдә.

Әллә шуға алдау көнгә
Ышанманым ғүмер буйы.
Уртаҡ булһын ҡыуаныстар—
Ағағыҙҙың алтын туйы!

С. СӘМИЕВ һүрәттәре







— Юҡ, мин иртәгә килермен инде.
— Нет, я лучше завтра приду.



С. ГОЛДОБИН һүрәте



Ғ. МИРҒӘСИМОВ һүрәте



И. КРЕЩЕНОВ һүрәте




— Бер кем дә килмәҫме икән ни!
— Неужели никто не придет?

П. ПЕТРОВ һүрәте

**ҺӘНӘК**
**№ 7 (889)**

Журнал «Хэнэк» («Вилы») на башкирском языке. Выходит два раза в месяц. Издается с сентября 1925 года.

КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты нәшриәте

Адрес редакции: 450079, Уфа-79, ул. 50-летия Октября, 13.
Телефоны: 22-91-02, 22-52-82, 22-87-43

Сдано в набор 23.02.87. Подписано к печати 6.03.87. Зак. 40. П04166. Формат 70×100¹/₈. Офсетная печать. Усл. печ. л. 2. Уч. изд. л. 2,6. Тираж 67000.

Баш редактор Марсель СӘЛИМОВ
Редколлегия: Әнғәм АТНАБАЕВ (баш редактор урынбаҫары), Михаил ВОЛОВИК, Агиш ҒИРФАНОВ (яуаплы секретарь), Сәғит САФИУЛЛИН, Рәсих ХАННАНОВ, Альфред ШТАБЕЛЬ.

Художество редакторы Х. Әхтәмов.
Техник редакторы С. Семенов.

Отпечатано в типографии издательства Башкирского обкома КПСС. Уфа-79, ул. 50-летия Октября, 13.

© «Һәнәк» 1987.

Индекс 73456 ● Хаҡы 25 тин.

обработка enrgs